*Һуңғы почтанан*

# Мөғжизәләр иле китапхана

Беҙҙең үҙәк китапханала төрлө саралар даими үтеп тора. Район халҡы өсөн бында төрлө йүнәлештәге түңәрәктәр, клубтар эшләй. «Йәнгүзәл», «Урал ҡыҙҙары», «Горница» кеүек клубтар Асҡарҙа ғына түгел, ауылдарҙа оло йәштәге кешеләрҙең ялын әүҙемләштереү маҡсатынан сығып ойошторолған. Нәшриәттә сыҡҡан яңы китаптар булһынмы, юбиляр яҙыусы, шағирҙарҙың ижады буйынса йәнле әңгәмә ойошторолһонмо, төрлө байрам саралары үткәрелһенме — клуб ағзалары дәррәү йыйыла. Мәҫәлән, «Горница» клубында ун биш кеше ағза булып тора. Эсмиральда Орлова, Мария Сәфәрғәлина, Данфира Харисова, Мәрхәбә Шәрәфетдинова, Людмила Яковлева, Зөлфиә Мостафина һәм Фәрзәнә Хамматова иң әүҙемдәре. Рус һәм башҡорт халыҡ ижадына, шиғриәт, музыка сәнғәтенә арналған кисәләр ҙә ойоштороla.

Күптән түгел «Әсә — изге һүҙ ул» тип аталған әҙәби-музыкаль кисәлә, мәҫәлән, ер йөҙөндә йәшәгән төрлө халыҡтарҙың әсәйҙәр тураһындағы изге һүҙҙәре яңғыраны. Уларҙың мәҡәл-әйтемдәрен, ҡанатлы һүҙҙәрен барлап, бик күп миҫалдар килтерелде, асылына төшөндөрөү буйынса ҡыҙыҡлы фекер алышыу булды, төрлө уйындар ойошторолдо. Сарала клуб етәксеһе Айгөл Тоҡомбәтова атаҡлы шәхестәрҙең әсәләр тураһындағы фекерҙәрен әйтеп, районыбыҙҙың ошо маҡтаулы исемдә лайыҡлы йөрөткән ҡатын-ҡыҙҙарын да телгә алды.

Клуб ойошторған шиғриәт кисәләре, музыкаль-поэтик сәйәхәттәр, сәйханалар йәшәүҙең асылын аңларға, үҙ әйләнә-тирәндән башҡа донъяны байҡарға, уға инанырға ярҙам итә. Бында хатта үткән осорҙарға сәйәхәт ҡылырға мөмкин. Оло быуын вәкилдәренең бала саҡ, йәшлек йылдары пионер, комсомол ойошмаларының гөрләп эшләгән сағына тура килгән. Д. Харисова, мәҫәлән, комсомолға арналған кисәне ойоштороусы ла, алып барыусы ла булды. «Ул осорҙа хәҙерге ш... келле урамда ҡайҙа һуғылырға белмәй йөрөгән кешеләр булманы, һәр кемдең эше, шөғөлө бар ине. Шул йәһәттән маҡтап телгә алырлыҡ быуын вәкилдәре булыуыбыҙ менән беҙ бәхетле», — тине элекке комсомолдар. Үткән дәүерҙәрҙән бөгөнгө көнгәсә йәшәп килгән китаптар иһә — Ер шарында көн итеүсе төрлө халыҡтарҙың ысын асылы ул, сөнки үткәндәрһеҙ беҙҙең киләсәк юҡ. Уларҙың тормош тәжрибәһен өйрәнеү юл күрһәтеүсе тере маяҡ кеүек. Бына шул мөғжизәнең барлығына инанырға булышлыҡ итә беҙҙең китапхана.

**Зөһрә КАШАПОВА.**

*Асҡар ауылы*